Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа с. Арсеново муниципального района
Зианчуринский район Республики Башкортостан

# Тема: Минеӊ шәжәрәм.

Выполнил: ученик 2 класса
МОБУ СОШ с. Арсеново
Тухватшин Амирхан.

Руководитель :Куватова А.С.

Минең шәжәрәм.

" Аҫаба башкортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ:   беренсеһе-үҙеңдең сығышыңды, икенсеһе - йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм халык ижадын белеү".

(М.Өмөтбаев)

Мин, Төхвәтшин Әмирхан, Ейәнсура районы Арсен урта мәктәбендә 2-се класта уҡыйым. Яраткан фәндәрем- математика, тирә-яҡты өйрәнеү, инглиз теле. Башҡорт телен дә яратып өйрәнәм. Минең әсәйем, Лидия Әхмир ҡыҙы, инглиз теленән белем бирә, мәктәптә эшләй. Атайым, Төхвәтщин Фаил Наил улы, умартасы. Ул күпләп бал ҡорттары үрсетә. Мине лә үҙ һөнәренә өйрәтә.Апайым,Венера, Силәбе өлкәһендә белем алыуын дауам итә, ә Гөлмирә апайым 8-се класта уҡый. Иң бәләкәйебеҙ, Марианна, балалар баҡсаһына йөрөй. Өләсәйебеҙ ҙә эргәбеҙҙә. Ул беҙҙе һәр ваҡыт тәмлекәстәр бешереп өйҙә көтөп тора. Бына шундай  татыу, берҙәм ғаиләм бар минең.

Атайым Армия сафында ла хеҙмәт итеп , үҙ бурысын үтәгән. Ә инде олатайҙарым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып бик күп батырлыҡтар күрһәткәндәр.Артабан мин улар  тураһында  һәм атайымдың туғандары хаҡында, атайымдан һорап белгәндәремде, ҡыҫҡаса яҙып үтергә булдым.

Беҙ-Төхвәтшиндәр .



Мин, 2-класс уҡыусыһы.



Был- мин, Төхвәтшин Әмирхан.



Беҙҙең татыу ғаиләбеҙ.



Минеӊ шәжәрәм.






Атайым Шаран районында, яҡындары менән.





Минең атайым сығышы яғынан Шаран районынан.Уның олатаһы Шайхитдин мулла булған , ғәрәп телен уҡытҡан. Революция ваҡытында ул бөтә әсбаптәрен, көмөш тәңкәләрен төндә ауыл ҡәберлегенә алып барып күмгән.Был урынды атайымдың атаһы Наил , минең ҡартатайым, белгән.Сөнки ул да ҡәберлеккә ғәрәпсә китаптарҙы күмешергә барған булған.

Шаран районында  атайым яғынан туған  Фәрхәнә инәйем һөйләүе буйынса улар йәшәгән өй ишеге алдында алтын, көмөш  йәшерелгән, ә хужалары себергә оҙатылған. 70-се йылдарҙа уларға элек йәшәгән өй хужаһының улы килеп, хазина эҙләгән, әммә алтын-көмөш табылмаған.

1982 йыл, атайыма  18 йәш. Армия хеҙмәтендә.








Атайым, Фаил, Дәүләкән районында Асылыкүл янында стройотрядта ҡатнашҡан. Унда йәшелсә һаҡлағыстары төҙөгәндәр. Отрядтағы иптәштәре менән күл буйына ял итергә йөрөгәндәр.



Атайым хеҙмәт иткән взвод Ырымбур өлкәһе Беляев районы Дон ҡасабаһында Урал йылғаһы буйында урынлашҡан булған.

Олатайым Нәсих Төхвәтшин




Төхвәтшин Нәсих олатайым Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан.У л унда 7-се танк полкының командиры булған. 1942-се йылда Жарки ауылын фашистарҙан азат иткән ваҡытта лейтенант Төхәтшиндың танкы ауыл эргәһендәге күлгә төшөп китә.Танк һыу аҫтына төшөп китә, экипаж һәм пулемет ҡотҡарыла. Һуғыштан һуң Нәсих олатайым Симферопольдә инженер булып эшләй .Ул һуңғы көнөнә тиклем шунда йәшәй.

Псков өлкәһенең « Пантера эҙҙәре» тип аталған йәмғиәт ойошмаһы тарафынан олатайым хаҡында түбәндәге белешмәләр эләп табылған.

**ПСКОВСКАЯ ОБЛАСТНАЯ ВОЕННО-ПАТРИОТИЧЕСКАЯ ПОИСКОВАЯ ОБЩЕСТВЕННАЯ ОРГАНИЗАЦИЯ**

**«СЛЕД «ПАНТЕРЫ»**

180000 г. Псков, ул. Некрасова, 36 тел. (8112) 16-30-39 тел.\факс 16-25-77

__________ № ______
На № ____ от ________

121293, г.Москва, ул.Братьев Фонченко, 10
Центральный музей Великой Отечественной войны

Вощинскому В.М.
Оресовскому Б.Ф.

Сообщаю сведения о командире танка Т-34 переданного в музей. Подполковник Тухватшин Насих Хасанович, 1919 года рождения, проживал в г.Симферополь Крымской области ул.Кржижановского 26-40.

В 1942 году лейтенант Тухватшин Н.С., командир взвода 7-го танкового полка 34-й мехбригады 2-го мехкорпуса Калининского фронта 5.12.1942 года при освобождении дер.Жарки Новосокольнического района танк лейтенанта Тухватшина Н.С. был подбит, под силой энергии движения его занесло в озеро сев.д.Жарки. Танк утонул, экипаж спасся. Вытащен только пулемёт.

Основание: ЦАМО, оп.4324, д.4, с.9

С уважением

Руководитель ВППОО"След"Пантеры" =Н.Горбачёв=

## Участие танка в боевых действиях

В результате работы с документами Центрального архива Министерства обороны Российской Федерации было установлено, что на рассвете 05.12.1942 г. исследуемый танк Т-34 и два танка Т-70, из состава **7 танкового полка,** переданного на усиление 3 Ударной армии, были приданы 44 лыжно-стрелковой бригаде для поддержке ее наступления на д.Лешково и д.Жарки. Танки прибыли в д.Суражино и совместно с 1-м батальоном 44 лыжно-стрелковой бригады получили приказ атаковать и овладеть д.Лешково и д.Жарки с последующей атакой на д.Евдокимищево.

В 11.00 танки заняли исходные позиции на юго-восточной окраине д.Изосимово, взяли с собой десант автоматчиков и стремительным ударом выбили противника из д.Лешково. В д.Лешково танки снова взяли десант автоматчиков и пошли в атаку на д.Жарки. К исходу дня 5.12.1942 г. наши войска овладели д.Жарки. В ходе боя танкисты дрались исключительно смело и геройски. **Экипаж танка Т-34** под командованием **лейтенанта Тухватчина** огнем и гусеницами уничтожил более 100 солдат противника. При преследовании отходящего врага под танк Т-34 были брошены одна за другой две гранаты, причем сам гранатометчик попал под гусеницы машины. От взрыва гранаты гусеница была разорвана и танк по инерции занесло **в озеро, что севернее д.Жарки.** Утонувший в озере танк Т-34 экипаж покинул, вытащие один пулемет ДТ."



Төхвәтшин Нурмөхәммәт Шәйхитдин улы – гвардия старшинаһы, артиллерист, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнгән батыр яугир. Ул көслө контузия алған. Һуғыштан һуң алған яраларынан оҙаҡ йылдар ауырығандан һуң вафат була.



Был атайымдың олатаһы, минең дә олатайым Төхвәтшин Ғабдулхай Шәйхитдин улы. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, майор.Һуғыштан һуң Туймазы районында военкоматта эшләй. 80-се йылдарҙа донъя ҡуя.

Атайым- умартасы.




Бына шулай матур ҙа, батыр ҙа, егәрле лә минең туғандарым!

Әле мин 2-се класта ғына уҡыйым.Киләсәктә атайым төҙөгән шәжәрәбеҙҙе өйрәнермен, эҙләнеү эштәре алып барырмын,тип уйлайым.